

*Гөлфиә ЮНЫСОВА*

***”Ниндәй татыу халыҡ,***
***ғорур халыҡ,***
***Затлы халыҡ икән,***
***тиһендәр...”***

## **Бөйөк халыҡтың беҙ балалары**
*(Йыр)*

Донъяла күп бай һәм аҫыл илдәр,
Башҡортостан — беҙҙең ғәзиз ер.
Үҫә торған халыҡ балалары
Береһен-береһе һөйөп:
”Батыр!” — тир.
*Ҡушымта:*
Бөйөк халыҡтың беҙ балалары,
Асылына ҡайтһын һәр йөрәк.
Милләттәш ул — ҡандаш,
йәндәш туған,
Туғандарға туған бик кәрәк.

Ата-бабаларҙың аманатын
Күҙ ҡараһы кеүек һаҡлайыҡ.
Илебеҙҙе төйәк иткәндәрҙең
Ышанысын беҙ ҙә аҡлайыҡ.
*Ҡушымта:*
Бөйөк халыҡтың беҙ балалары,
Именлектәр илгә теләйек.
Аҡыллылыҡ башы —
берҙәмлектә,
Дуҫ-иштәрҙең ҡәҙерен беләйек.

Сәфәр ҡылып, йәки ҡунаҡ булып,
Бар ҡитғанан беҙгә килһендәр.
Ниндәй татыу халыҡ,
ғорур халыҡ,
Затлы халыҡ икән, тиһендәр.
*Ҡушымта:*
Бөйөк халыҡтың беҙ балалары,
Беҙҙә ҡот һәм бәхет тапһындар.
Башҡорттарҙың күңел яҡтылығын
Илдәренә алып ҡайтһындар.

## **Ат өҫтөндә Салауат**
*(Йыр)*

Һыбай сыҡты егет, халҡы өсөн
Азат тормош, яҡты таңдар даулап.
Үҙе ҡалды Балтик ярҙарында,
Исемдәре ҡайтты дандар яулап.
*Ҡушымта:*
Салауат күпере буйлап,
Сабып бара Салауат.
Сабып бара һауалап.
Быуаттарҙы быуаттарға
Тоташтыра Салауат,
Ат өҫтөндә Салауат.

Дошмандарға ҡаршы атылғанда,
Атҡынайы булды талмаҫ ҡанат.
Шуға һәр саҡ халыҡ күңелендә
Ат өҫтөндә йәшәй, ай, Салауат.

Салауаттың йыры, батыр рухы
Яҡын бөтәбеҙгә бала саҡтан.
Илем күкрәгендә мәңге тынмаҫ
Йөрәк булып типһен
Башҡортостан!

## Аҡбуҙат

*(Йыр)*

Аҡбуҙаткай осҡор затлы,
Шуға ла ул пар ҡанатлы.
Һәр кемдең дә күңелендә
Йәшәй хыял — Аҡбуҙаты.
*Ҡушымта:*
Башҡортостан — изге ерем,
Һиндә йәшәү, бәхет таптым,
Һиндә минең ирек һөйгән
Аҡбуҙатлы ғорур халҡым.

Көмөш яллы Аҡбуҙатым,
Бер ҡото һин тыуған яҡтың,
Илде һаҡлап, хаҡлыҡ яҡлап,
Ирҙәр менән яуҙар саптың.

Мин ышанам: Ҡош юлынан
Алға елер Аҡбуҙатым.
Азат тыуған еребеҙҙә
Мәңге йәшәр минең халҡым.

## Туған телем

*(Йыр)*

Ер шарында илдәр бик күп,
Араһында һин бер бөртөк,
Башҡортостан — ғәзиз илем.
Ҡотло ла һин, һутлы ла һин,
Көс-дәрт бирер утлы ла һин,
Илкәйемдә — туған телем.
*Ҡушымта:*
Яҡтырт юлды, күңелдәрҙе,
Арттыр аҡыл-белемдәрҙе,
Мәңге йәшә, байы һәм үҫ,
Башҡорт теле — халҡым теле,
Дәүләт теле, туған телем,
Быуаттарҙан-быуатҡа күс!

Наҙлылығың таң ҡалдыра,
Нескәлегең һоҡландыра,
Хәтерләтә баҡса гөлөн.
Кәрәкһә — өтөп алаһың,
Хәнйәрҙәй телеп һалаһың,
Үткерһең дә, туған телем!

Туған телем, һиңә хаҡлыҡ,
Һары һағыш, ап-аҡ шатлыҡ —
Бөтәһе лә һыя ала.
Балдай татлы һәр бер һүҙең,
Һинән моңло, һинән затлы
Һис нәмә юҡ был донъяла.

## Өфөм

*(Йыр)*

Һиндә белем, илһам алам,
Йәшәү өсөн дуҫтар табам.
Тау башында ғорур ҡалам,
Йәшлек төҫөм —
Гүзәл Өфөм.

Гөлдәр үҫә оя-оя,
Йүкәләрең бал-һут йыя,
Һиндә кеше мотлаҡ тоя
Һөйөү хисен,
Йомарт Өфөм.

Һағыштарҙы ҡыуа-ҡыуа,
Дүрт тарафтан йылға йыуа,
Һиндә аяҙ, яҡты донъя
Һәр кем өсөн,
Нурлы Өфөм.

Урамдарың тора гөрләп,
Йорттар ҡалҡа күккә үрләп.
Илде данлап, яна дөрләп
Ҡеүәт-көсөң,
Уңған Өфөм.

Хисле ҡалам, көслө ҡалам,
Ғәзиз һиңә барлыҡ балаң.
Ғүмер буйы хайран ҡалам.
Хыял-төҫөм,
Өфөм, Өфөм!

## Ирҙәр булып ҡалайыҡ

*(Йыр)*

Һөйөү уты — йәшәү ҡото,
Яндырайыҡ, янайыҡ.
Ваҡланмайыҡ, тапланмайыҡ,
Ирҙәр булып ҡалайыҡ.

Донъя йөгө еңел түгел,
Иңебеҙгә һалайыҡ.
Зарланмайыҡ, һыҡтанмайыҡ,
Ирҙәр булып ҡалайыҡ.

Барыр юлдар кәртәләнһә,
Сығыр юлды табайыҡ.
Киләсәк бит беҙҙең ҡулда,
Ирҙәр булып ҡалайыҡ.

Еребеҙгә хәүеф килһә,
Күкрәк менән ябайыҡ.
Ил намыҫы — ир намыҫы,
Ирҙәр булып ҡалайыҡ.

## Диңгеҙ менән Шишмә

Күптән булған инде был хәл,
Байтаҡ йылдар, байтаҡ быуат элек.
Тауҙың күкрәгенән көнгә ялтлап,
Шишмә сыҡҡан селтер-селтер көләп.

Ағып киткән таштар араһынан
Шишмәкәйҙең саф һәм һалҡын һыуы.
Күк диңгеҙгә барып ҡойоу икән
Был шишмәнең изгелекле уйы.

Теләккәйе маҡсатына етеп,
Ул диңгеҙҙе бер саҡ эҙләп тапҡан.
Күк диңгеҙҙең тоҙон бөтөрәм, тип,
Аҡҡан да ул, эй, сәмләнеп аҡҡан.

Олпат диңгеҙҙең, ни, үҙ тормошо:
Тоҙло тулҡындарын ажғырлатып,
Ярҙарына бәреп уйнай бит ул.
Бар ғүмерен уға бағышлаған
Саф шишмәне хатта тоймай бит ул.

Еңмеш шишмә һаман селтер-селтер,
Күк диңгеҙ, тип, ярһып оса ғына.
Ә диңгеҙ? — Илтифатһыҙ, ғәмһеҙ,
Ялмай уны сикһеҙ ҡосағына.

Их, шишмәкәй, нисек аңламайһың,
Һис тә юҡҡа әрәм була көсөң.
Саф тамсылы шишмә һыуҙарының
Бер кәрәге юҡ та уның өсөн.
Диңгеҙ бит ул...

## Ихласлыҡ

*(Йыр)*

Алдама һин мине, алдама, —
Алдашыу ғәҙәте алама.
Ялғанды ысынға ялғама,
Белмәç, тип, яңылыш аңлама.

Һис ҡасан булма һин яһалма,
Йөрәккә әрнеүле ут һалма.
Алдашһаң, ышаныс юғалыр,
Хәтерҙе яралап шом ҡалыр.

Алдама үҙеңде, алдама,
Алданым, оттом, тип, алданма.
Ваҡыттар, ғүмерҙәр тиҙ үтә,
Ихласлап йәшәүгә ни етә?

Ихласлыҡ — саф күңел аҡлығы,
Ихласлыҡ — дуçлыҡтың хаҡлығы.
Ихласлыҡ ул — йондоҙ сатҡыһы,
Ихласлыҡ — донъяның яҡтыһы.

## Инә кош

Ел-ямғырҙан һаҡлап бәпкәләрен
Ҡанат аҫтарында үҫтерә.
Бына инде улар оса башлай,
Үҙ ҡанаттарына көс керә.

Йә талпынып ҡарай инәләре,
Йә ояға килә яңынан.
Тормош ҡанундары кешегә лә,
Ҡоштарға ла бер үк яҙылған.

Үҫмер ҡоштар инде йыраҡтарға
Ташлап китә тыуған ояһын.
Имен була күрһен сәфәрҙәре,
Яҙмыштары һәр саҡ аяһын.

Хәүеф тә бар, сикһеҙ
сабырлыҡ та
Инә коштоң ике күҙендә.
Өйрәнергә ине ошо ҡоштан
Сабырлыҡтар һаҡлап түҙергә.

## Күҙҙәр етеп килгәндә

*(Йыр)*

Һүҙ ялғана һүҙҙәргә,
Беҙ атлайбыҙ үрҙәргә.
Пар ҡанаттар — индәрҙә,
Аяҡ теймәй ерҙәргә.

Күҙҙәр ҡарай күҙҙәргә,
Сер ҡушыла серҙәргә,
Сәстәр уйнай елдәрҙә,
Ҡояш көлә йөҙҙәрҙә.

Их, үтер был көндәр ҙә,
Етер моңһоу көҙҙәр ҙә.
Ошо моңһоу көҙҙәрҙә
Уйың булыр кемдәрҙә?!

## Ҡаҙ өмәһе

Уңған ҡыҙҙар ҡаҙ йолҡалар,
Күмәкләгәс — күңелле.
Йырһыҙ ниндәй байрам булһын,
Йыр күтәрә күңелде.

Ә егеттәр тышта көтә,
Ҡаҙҙар сайҡай барырға.
Өйҙә — йыр, урамда — гармун,
Мондар бергә ағыла:

— Ҡаҙ ҡанаттары йыямын,
Юлдарға һибер өсөн.
Ҡаҙ өмәһенә килдем мин,
Тик һине күрер өсөн.

Ҡаҙ мамығы кеүек кенә,
Ҡарҙар яуа һибәләп.
Кеше һиҙер, йөрөмәй тор
Мине генә тирәләп.

Ҡаҙ өмәһе, ҡаҙ өмәһе
Бөгөн беҙҙең ауылда.
Ҡаҙ өмәһе үтер, китер,
Булһаңсы гел янымда.

Ҡаҙ ҡанаттары ҡойола,
Ҡаҙҙар ҡанат ҡағынһа.
Бөгөндән туй яһар инем,
Үҙемә тиң табылһа.

...Егет-елән ҡыҙ күҙләһә,
Кейәү һайлай йәш ҡыҙҙар.
Ҡаҙ өмәһенән башлана
Көтөп алынған туйҙар.

Йәш киленде баҫтыралар
Туйҙа мамыҡ мендәргә.
Ҡыҙ ғүмере — ҡаҙ ғүмере,
Сират быйыл кемдәргә?!



## Миҙгелдәрҙә аҙашам

*(Йыр)*

Яҙҙар үтеп, йәйҙәр килгән,
Шуны ла һиҙмәгәнмен.
Яҙғы талдың бөрөләрен
Йәйҙәрҙән эҙләгәнмен.

Япраҡ ярыр йәш бөрөләр
Була бары яҙҙарҙа.
Яҙҙарҙыҡын яҙҙарҙан ал,
Китмә әллә ҡайҙарға!

Күк бөрлөгән, ҡара муйыл,
Ҡыҙарып бешкән балан...
Емеш тирер ваҡыт еткән,
Мин сәскә йыям һаман.

Ах, нишләргә, был юлы ла
Миҙгелдән һис уңманым:
Яҙын йәйгә ашыҡҡайным,
Әле көҙгә һуңланым.



## Үҙем өсөн

*(Йыр)*

Һиңә бер ни ҙә аңлатмай
Минең зат, минең исем.
Йөрәгемдән вулкан булып,
Берсә ҡайнап, берсә урғып,
Ағыла изге хисем.

...Әлдә генә һин күрмәйһең уны.

Яуап хистәр көтмәйем мин,
Һөйөү өмөт итмәйем.
Вулкандың мин юлын бүләм,
Сығармайым, йоҙаҡ менән
Күңелемә бикләйем.

...Борсолмасы, берүк, хафаланма!

Килмә, белмә, ғәйепләмә,
Булмаһын миндә эшең.
Яныуым да, көйөүем дә,
Йәшеренеп һөйөүем дә
Бары тик үҙем өсөн.

...Әгәр белһәң, нишләр инең
икән?

## Мөхәббәт, изгелек, матурлыҡ

*(Йыр)*

Ер йөҙөнә яралғандан бирле
Өс таяуҙа йәшәй кешелек:
Кешеләрҙе һәр саҡ кеше иткән,
Ер шарына яҡтылыҡ, нур
һипкән —
Матурлыҡ, мөхәббәт, изгелек.

Ерҙе күккә илаһи көс бәйләй,
Көн дә ал таң булып атырлыҡ.
Аҙаштырһа тормош һуҡмаҡтары,
Дөрөҫ юл күрһәтә беҙгә бары
Мөхәббәт, изгелек, матурлыҡ.

Ерҙе наҙлап, ҡояшлы яҙ килһә,
Йәшәрә лә китә тәбиғәт.
Беҙҙең ғүмерҙән дә йырҙар ҡалыр,
Киләсәккә һәр саҡ әйҙәп барыр
Матурлыҡ, изгелек, мөхәббәт.